*Вәли ПСӘНЧИН,*
*Башҡортостан мәктәптәренең атҡаҙанған уҡытыусыһы*

# ХЕҘМӘТТӘРЕБЕҘ ЙӨҘ ҠЫҘАРТЫРЛЫҠ ТҮГЕЛ

Беҙҙең филиалдың фәнни хеҙмәткәрҙәренә республикалағы милли мәктәптәрҙең, бигерәк тә башҡорт мәктәптәренең башҡорт теле һәм әҙәбиәте, рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларына ғилми-методик, шулай уҡ ғәмәли ярҙам күрһәтеү бурысы йөкмәтелгән. Унан тыш синыф етәкселәренә тәрбиәүи эште ойоштороу, уны башҡарыу яғынан да ярҙам күрһәтергә тейешбеҙ. Был мөһим эштәрҙән башҡа, беҙҙең коллективҡа уҡыу программалары, дәреслектәр төҙөү, булғандарын камиллаштырыу, күргәҙмә материалдар эшләү, төрлө уҡыу-уҡытыу ҡулланмаларын яҙыу, алдынғы тәжрибәне дөйөмләштереү, уны таратыу, төрлө методик алымдарҙы, төҙөлөп ятҡан дәреслектәрҙе һынау кеүек көнүҙәк мәсьәләләр йөкмәтелгән. Филиалдың ғилми хеҙмәткәрҙәре үҙҙәренең алдарына ҡуйылған бурыстарҙы бына ҡырҡ йылдан артыҡ уңышлы башҡарып килә. Әйтелгәндәрҙе түбәндәге күренештәр тулыһынса раҫлай: филиалдың йәшәү осоронда 1000-дән артыҡ эш баҫтырып сығарылған. Уларҙың араһында 56 программа, 102 дәреслек, 150-гә яҡын методик һәм төрлө ярҙамсы ҡулланма, 26 монография, төрлө матбуғат баҫмаларында, ғилми йыйынтыҡтарҙа 500-ҙән артыҡ проблемалы мәҡәлә баҫылған.

Филиалдың эшмәкәрлеген асыҡ сағылдырған был күрһәткестәр ғилми хеҙмәткәрҙәрҙең тәүге көндәрҙән үк әүҙем эшкә тотонғанлыҡтарын күрһәтә: туған телдән, рус теленән һәм әҙәбиәттәрҙән яңы программаларҙы, уларҙың башланғыс һәм өлкән синыфтарҙа һынау (эксперимент) эштәренә, халыҡ мәғарифын ойоштороу проблемаларын хәл итеүгә керешәләр, ул өлкәлә лә етди уңыштар бар. Күп яҡлы был фәнни эштәр менән бергә, филиал хеҙмәткәрҙәре һәр йыл төрлө аудиторияларҙа, шул иҫәптән уҡытыусыларҙың семинарҙарында, курстарҙа, конференцияларҙа, төрлө кимәлдәге кәңәшмәләрҙә 500-550 сәғәт лекция уҡыйҙар, доклад һөйләйҙәр, сығыштар яһайҙар.

Филиал коллективы республика мәктәптәрендә туған тел һәм әҙәбиәт-

*Псәнчин Вәли Шәғәли улы 1930 йылда Күгәрсен районының I Дәүләткол ауылында тыуған. Морак педагогия училищеһын (1948) һәм Башкорт дәүләт университетын (1959) тамамлаған. БАССР Мәғариф министрлығында (1959-1961) эшләй, БДУ-ла аспирантурала укый (1961-1964), 20 йыл шул ук университетта (1964-1984) укыта, артабан Белем биреүҙең милли мәсьәләләре институтының мөдире (1984-1993) вазифаһын башкара. Әле шул филиалда төп фәнни хеҙмәткәр. Филология фәндәре кандидаты, доцент. Башкорт теленең тарихи грамматикаһы, стилистикаһы, урта һәм юғары мәктәптәр өсөн дәреслектәр, төрлө методик кулланмалар, программалар төҙөүҙә әүҙем эшләй. 200-ҙән ашыу хеҙмәт, шул иҫәптән 30-лап китап авторы.*



те уҡытыуҙың торошон, ул предметтарҙан уҡыусыларҙың белем кимәлен, уның сифатын, күнекмәләр өҫтөндә эшләүҙең һөҙөмтәһен өйрәнеү буйынса ҙур эш башҡарҙы, улар хаҡында тейешле органдарға сара күрергә хәбәр итеп, уңыштарҙы билдәләргә тәҡдим яһаны. Ундай мөһим мәсьәләне өйрәнеү барышында ғына ла йылына 300-400 сәғәт дәрес ҡаралып, синыфтан тыш бик күп сараларҙа ҡатнашылды. Мәҫәлән, 1987 йылда беҙҙең коллектив ағзалары 89 урта, 35 һигеҙ йыллыҡ, 32 башланғыс мәктәптә, 19 балалар баҡсаһында булып, 500-ҙән артыҡ дәрес ҡараны. Улар һәр дәрескә юғары сифатлы анализ яһанылар, кәңәш бирҙеләр, райондарҙың мәғариф ойошмаларына үҙҙәренең тәҡдимдәрен белдерҙеләр. Күрһәтелгән дәрестәр һаны эсендә рус теле дәрестәре лә бар. Филиал тормошонан бындай миҫалдарҙы күп килтерергә мөмкин. Мәҫәлән, 1986 йылдың ноябрендә Силәбе өлкәһенең Арғаяш һәм Ҡонашаҡ райондарында В.Ш.Псәнчин, Р.Ғ.Аҙнағолов, Х.А.Толомбаев, М.Б. Юлмөхәмәтов (ул саҡта уҡытыусылар белемен камиллаштырыу институтында туған телдәр кабинеты мөдире ине), И.Ә. Шарапов иптәштәрҙән торған бригада, ике аҙнаға яҡын ваҡыт эсендә 35 мәктәптә, 200-ләгән дәрестә булып, башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡытыуҙың торошон өйрәнеп, район, ауыл советы, директорҙар ҡатнашлығында кәңәшмә уҙғарып ҡайтты. Ә 1991 йылдың ҡара көҙөндә филиалдың В.Ш.Псәнчин, И.Ә.Шарапов һәм Т.Ғ.Шаһмановтарҙан торған төркөмө Күгәрсен районында бер аҙнала 16 мәктәптә булып, әсә телен уҡытыуҙың торошон өйрәнеп, киңәйтелгән кәңәшмәлә һөҙөмтә менән сығыш яһаны. Әйтергә кәрәк, шунан һуң район мәктәптәрендә әсә телен уҡытыу мәсьәләһе ыңғай яҡҡа үҙгәрҙе һәм хәҙер әсә телен уҡытыу буйынса ойошторолған республика күләмендәге байтаҡ саралар шул районда үткәрелә.

Филиал коллективы халыҡ мәғарифы министрлығы менән һәр саҡ бәйләнештә булды, райондарҙа белем биреүҙең торошон, башҡа берәй проблеманың хәл ителгәнлеген фронталь (киң планда) тикшергәндә, ике коллектив бергәләп эшләне. Ундай саралар йоғонтоло ла була торғайны. Хәҙерге финанс шарттарында тормош тарафынан аҡланған коллектив сараларҙы үткәреүе ҡыйынлашҡандан-ҡыйынлаша бара, хатта бөтөнләй туҡталды тип әйтергә мөмкин.

Филиал хеҙмәткәрҙәре башҡорт теле, әҙәбиәте, рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының төрлө кимәлдәге фәнни-ғәмәли конференцияларын үткәреүгә лә ҙур әһәмиәт бирә килде. Был мөһим эш төрө бигерәк тә 80-се йылдарҙа, 90-сы йылдарҙың башында, дөйөм һәм профессиональ белем биреү реформаларын тормошҡа ашырған йылдарҙа, әүҙемләшкәйне. Мәҫәлән, 1989 йылдың апрелендә Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институты менән берлектә «Башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡытыуҙың көнүҙәк мәсьәләләре» темаһына уҙғарылған конференция хатта өлкә-ара кимәлен алғайны. Унда 50-гә яҡын тәрән йөкмәткеле доклад тыңланылды. Шундай уҡ конференция 1990 йылдың 4-5 ғинуарында Силәбе ҡалаһында булып, «Башҡорт телен, әҙәбиәтен уҡытыуҙың йөкмәткеһен, методтарын камиллаштырыу» мәсьәләләренә бағышланды. Унда Силәбе һәм Курган уҡытыусылары ҡатнашып, 30 доклад тыңланды. Шул уҡ йылдың 27-28 мартында Ырымбур ҡалаһында Һамар, Һарытау, Ырымбур уҡытыусылары ҡатнашлығында конференция уҙҙы. Конференцияла рус теле уҡытыусылары ла ҡатнашты.

Әле һаналған республика, өлкә-ара фәнни-ғәмәли конференцияларҙан тыш филиал хеҙмәткәрҙәре район һәм район-ара конференциялар, семинарҙар, яңы фәнни хеҙмәттәрҙе коллективта тикшереү кеүек саралар ҙа уҙғарып торҙо. Шундай ойоштороу яғынан күп көс һәм мәшәҡәттәр талап иткән саралар менән бергә, фәнни тикшеренеү эштәре һүнмәне, ә киреһенсә, әүҙемләште генә. Ошо уңайҙан филиалды ойоштороу йылдарынан башлап 40 йылдан артыҡ үҙенең емешле ғүмерен шул изге эшкә арнаған хеҙмәт ветераныбыҙ Мәрйәм Ғилметдин ҡыҙы Ғималова тураһында айырыуса билдәләп үтке килә. Ул 60-сы йылдарҙың башынан алып VII-VIII (тәүҙә VI-VII) синыфтары өсөн әҙәбиәт дәреслеген төҙөүсе авторҙар коллективына етәкселек итте, әле һуңғы йылдарҙа ғына X синыф өсөн әҙәбиәт дәреслеге лә уның етәкселегендә яҙылды. Ул дәреслектәрҙең һәр береһенә методик ҡулланма, синыфтан тыш уҡыу китаптары, монографик планда яҙылған «IV-VII синыфтарҙа башҡорт әҙәбиәтен уҡытыу методикаһы», «VIII-

X синыфтарҙа башҡорт әҙәбиәтен уҡытыу методикаһы», «V-XI синыфтарҙа башҡорт әҙәбиәтен уҡытыу методикаһы» (1994) китаптары яҙыу Мәрйәм Ғилметдиновнаның ни тиклем бирелеп эшләгәнлеген күрһәтә. Уның етәкселегендә төҙөлгән дәреслектәр конкурстарҙа беренсе урындарҙы алды. Әйткәндәй, В.Ш.Псәнчин төҙөгән «Башҡорт теле» (5 синыф), «Башҡорт теле» (9 синыф), Ф.Ф.Аҙнабаева, Р.Ғ. Ишимова ҡатнашлығында төҙөлгән рус теле дәреслектәре лә конкурстарҙа еңеп сыҡты.

1984 йылғы мәктәп реформаларын тормошҡа ашырыу йылдарында филиалда республикабыҙҙа рус теле һәм әҙәбиәтен уҡытыу эшен артабан камиллаштырыу юлында ла арымай-талмай эш алып барылды. Ул йылдарҙа өлкән ғилми хеҙмәткәрҙәребеҙ Р.Ғ. Ишимованың 4-7 синыфтарҙың «Русский язык» дәреслектәренә эшләгән тауышлы ҡушымталары ғына ни тора! Улар, бөтәһе 35 пластинканан тороп, Мәскәүҙең юғары квалификациялы директорҙары тарафынан яҙылғандар. Шундай бик кәрәкле ҡулланманы ҡабаттан яңы быуын дәреслектәргә яраҡлаштырып эшләүгә хәҙер финанс мөмкинлектәре етешмәй. Шул йылдарҙа мәктәп һүҙлектәре һәм методика баҫтырып сығарыла башланы, улар араһында «Русско-башкирский учебный словарь» (1986, Ф.Ф.Аҙнабаева һ.б.), «Башҡорт теленең орфографик һүҙлеге (1988, Р.Ғ.Аҙнағолов), «Башҡорт телен уҡытыу методикаһы» (1985, Р.Ғ.Аҙнағолов, Х.А.Толомбаев, И.Ә.Шарапов), 80-се йылдарҙың башында уҡ Р.Ғ.Ишимова ҡатнашлығында «Методика преподавания русского языка в 4-8 классах башкирской школы» тип әҙерләнгән китап 1996 йылда ғына 5-9-сы синыфтар өсөн баҫылып сыҡты һ.б.

Филиал коллективы хеҙмәткәрҙәре бөгөн дә республикабыҙҙың дөйөм белем биреү мәктәптәрендә генә түгел, ә инновацион уҡыу йорттарында ла әсә телен һәм әҙәбиәтен, рус телен һәм әҙәбиәтен уҡытыуҙың торошон күтәреү юлдарын өйрәнеү өҫтөндә нығышмалы эш алып баралар. Һуңғы йылдарҙа В.Ш. Псәнчин тарафынан «Педагогия училищелары, колледждары өсөн башҡорт теленән программа» (1997), педагогия училищелары, колледждар, гимназиялар, лицейҙар өсөн «Башҡорт теле. Күнегеүҙәр йыйынтығы» (1997), «Башҡорт теленән урта мәктәп өсөн программалар» исемлеге тупланмаға индерелгән «Башҡорт телен VII-X синыфтарҙа тәрәнәйтеп өйрәнеү» (авторҙашы Р.Ғ. Аҙнағолов), X класс өсөн «Күркәм әҙәбиәт телен өйрәнеү», XI класҡа «Телмәр мәҙәниәте» курстарынан, уға ҡушымта рәүешендә «Уҡыусының телмәр мәҙәниәте»нән, «Тел һәм тормош» темаһы буйынса факультатив курстан программалар төҙөлдө (1995). Шул уҡ хеҙмәткәр «Башҡорт теленең стилистикаһы»нан, «Риторика нигеҙҙәре»нән юғары синыф уҡыусылары өсөн ҡулланмалар, 10-11 синыфтарға башҡорт теленән дәреслек төҙөп нәшриәткә тапшырҙы. Һуңғы ике ҡулъяҙма быйыл донъя күрәсәк.

Рус телен башланғыс синыфтарҙа үҫтереүсе метод менән өйрәнеү проблемаһы өҫтөндә филиалыбыҙҙың етәксеһе Ф.Ф.Аҙнабаева бик әүҙем эшләй. Ул шул метод нигеҙендә бөтә дүрт синыфҡа дәреслек, яҙыу өлгөләре, методик күрһәтмәләр баҫтырҙы ла инде. 2000 йылда ғына ла Ф.Ф.Аҙнабаеваның дүрт хеҙмәте: «Букварная тетрадь», «Игровые приемы в развивающем обучении русскому языку в нерусской школе», «Русский язык, I класс», «Русский язык, IV класс» нәшер ителде. Ул бөтә был хеҙмәттәрҙең авторҙар коллективына етәкселек итә. Рус телен һәм әҙәбиәтен урта мәктәптә уҡытыу проблемалары буйынса, алда әйткәнебеҙсә, Р.Ғ.Ишимова (тел буйынса) әүҙем эшләһә, әҙәбиәт уҡытыу методикаһы буйынса Ф.Х.Әминева актив эшләй. Ул, үҙенең проблемаһынан сығып, актуаль темалар буйынса эленән-әле мәҡәләләр менән матбуғатта сығыш яһай, 5-7 синыфтарға рус әҙәбиәте дәреслектәре яҙҙы, Мәскәүҙәге институт хеҙмәткәрҙәре менән берлектә рус әҙәбиәте дәреслектәренә хрестоматиялар сығарыуҙа ҡатнашып килә.

Филиалдың йәш ғилми хеҙмәткәрҙәре лә көнүҙәк проблемалар өҫтөндә әүҙем эшләйҙәр: М.С.Дәүләтшина әҙ комплектлы башланғыс мәктәптәрҙә төрлө предметты уҡытыу мәсьәләләре менән шөғөлләнә, урыҫ кластарында уҡыған башҡорт балалары өсөн дәреслек, башҡа ҡулланмалар булдырыуҙа ҡатнаша, үткән йыл кандидатлыҡ диссертацияһы яҡланы.

З.Р. Назарова беҙҙең филиалда бығаса тикшерелмәгән уҡыусыларҙың психологик үҙенсәлектәре, төрлө шарттарҙа психологик торош мәсь-

әләләре менән шөғөлләнә. Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы баҡсаларҙа уҡытыу, тәрбиәләү мәсьәләләрен иң йәш хеҙмәткәребеҙ А.Ф.Фазлаева тикшерә.

Юғары уҡыу йорттарына ҡабул итеү имтихандары абитуриенттарҙың, олимпиадаларҙа ҡатнашҡан уҡыусыларҙың башҡорт теленән белем кимәленең ҡәнәғәтләнерлек булмауын, телмәр ярлылығын күрһәтә. Дөйөм урта белем биреүсе мәктәп, хатта гимназия-лицей уҡыусыларының тел байлығы ғәҙәттәге көнкүрештә ҡулланылған тел кимәленән артмай. Әсә телен уҡытыуҙағы был хәүефле хәлдән ҡотолоу маҡсатынан сығып, туған тел уҡытыуҙың торошон, уҡыусыларҙың тел байлығын, аралашыу телмәрен үҫтереүҙе күҙ уңында тотоп, әсә теленән 5-9 синыфтар өсөн тәғәйенләнгән программа (1999 й.) телмәр үҫтереү бүлеген алғы планға сығарып төҙөлдө; мәҫәлән, 5 синыфтың программаһы уҡыусының телмәрен үҫтереүҙе күҙ уңында тотҡан бүлексәләр менән башлана: «Йәнле телмәрҙе тыңлау һәм аңлау», «Уҡыу һәм уҡығанды аңлау», «Һөйләү һәм яҙыу» һәм башҡалар. «Тексты анализлау һәм һөйләү»ҙе, «Аралашыу өсөн темалар»ҙы үҙ эсенә ала. Шунда уҡ «Һөйләү һәм яҙма телмәр төрҙәре» бүлексәһе бирелеп, ул диалогик һәм монологик телмәрҙәргә иғтибарҙы йүнәлтә. Шунан һуң ғына 5 синыфта үҙләштерeләсәк төшөнсәләр, күнекмәләр һаналып бирелә. Иң һуңынан ғына фонетик, лексик, грамматик темалар сағылдырыла. Шул рәүешле уҡыусының интеллектуаль телмәрен, йәғни оҫта телмәрле шәхес үҫтереүгә өҫтөнлөк бирелә.

Рәсәй Федерацияһының Дөйөм профессиональ белем биреү министрлығы янындағы Белем биреүҙең милли мәсьәләләре институтының Башҡортостан филиалы бына 40 йылдан артыҡ республикабыҙҙа халыҡ мәғарифы системаһын үҫтереүгә, юғары сифатлы уҡыу-уҡытыу әсбаптары менән тәьмин итеүгә үҙенең ҡиммәтле тос өлөшөн индерә. Филиал хеҙмәткәрҙәре туған халҡыбыҙҙың интеллектуаль шәхестәрен үҫтереү юлында арымай-талмай эшләүен дауам итә.

Филиал менән үҙ эшенә яуаплы ҡараған, бынамын тигән абруйлы шәхестәр етәкселек итте: Ғ.Н.Фәтихов (1958-1959), Р.С.Әлибаев (1959-1966), Н.Х.Ишбулатов (1966-1968), Р.В.Әлмөхәмәтов (1968-1976), Д.М.Хәсәнова (1976-1979), С.Ғ.Һунаршин (1979-1984), В.Ш.Псәнчин (1984-1993), Ф.Ф.Аҙнабаева (1993 йылдан алып). Уның тәүге мөдире Ғ.Н.Фәтихов (1958-1959) филиалды тейешле кимәлдә ойоштороп ебәрҙе. Ул артабан Бөрө désinституты ректоры вазифаһына үрләтелде, ә 70-се йылдарҙа Р.В. Әлмөхәмәтов (1968-1976) Стәрлетамаҡ пединститутына шундай уҡ вазифаға ебәрелә. 60-сы йылдарҙа филиалдың етәксеһе вазифаһын республикабыҙҙа ҙур шөһрәт ҡаҙанған шәхестәрҙең береһе Сәғит Рәхмәт улы Әлибаев алып барҙы. Артабан Н.Х.Ишбулатов, Д.М.Хасанова, С.Ғ.Һунаршин, В.Ш.Псәнчин һәм Ф.Ф.Аҙнабаева. Бөгөнгө ауыр финанс шарттарында филиал хеҙмәткәрҙәре республика мәктәптәрен яҡшы сифатлы, заман талабына яуап биргән дәреслектәр, башҡа ярҙамсы методик ҡулланмалар ижад итәләр икән, ул мөһим эште ойоштороуҙа бөгөнгө етәксенең роле ҙур.

Филиал шулай уҡ республикала педагогик фәндәр буйынса ғилми учреждениеларға, төрлө кимәлдәге уҡыу йорттарына юғары квалификациялы кадрҙар әҙерләү үҙәге лә булды. Уның аша әҙерлек үтеп, 40-тан артыҡ педагогия фәндәре кандидаттары, докторҙар үҫеп сыҡты.

Филиалдың абруйын күтәрер билгестәр эшләне унда. Бына шуларҙың ҡайһы берҙәре: Ғ.Н.Фәтихов — тәүге мөдир, М.Ғ.Ғималова — РСФСР, БАССР мәктәптәренең атҡаҙанған уҡытыусыһы, К.Д.Ушинский исемендәге миҙал кавалеры, Ә.М.Әхмәрова — республикабыҙҙың атҡаҙанған уҡытыусыһы, Ж.Ғ.Кейекбаев — Ленин, Почет билдәһе ордендары кавалеры, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре, филология фәндәре докторы, профессор, С.Р.Әлибаев — РСФСР, БАССР мәктәптәренең атҡаҙанған уҡытыусыһы, Хеҙмәт һәм Боевой Ҡыҙыл Байраҡ ордендары кавалеры, Ф.Х.Мостафина — РСФСР, БАССР мәктәптәренең атҡаҙанған уҡытыусыһы, Ленин ордены кавалеры, философия фәндәре кандидаты һ.б.

Бөгөн дә филиал хеҙмәткәрҙәре изге һәм матур традицияларҙы дауам итә.